# Сәнғәтебеҙ миссияһы

*Быйылғы театраль сезондың тәүге аҙналарында ук сәнғәт темаһына яҙыусы журналистар араһында сенсацияға тартым хәбәр таралып өлгөргәйне. Оҙакламай баҫмаларҙа Сәғиҙулла Байегет, Азамат Ғафаров һәм Азат Йыһаншиндың баш калала Музыкаль комедия театры ойоштороу тураһында интервьюлары бер-бер артлы донъя күрә башланы. «Ватандаш» редакцияһы ошо теманы асып, укыусыға еткереү максатында был күркәм, оло идеяны күтәреүсе Сәғиҙулла Байегет менән осрашты. Күренекле артист бик теләп ниәттәре, ижади ынтылыштары, фекерҙәре менән уртаклашты.*

*Сәғиҙулла Байегет (Сәғиҙулла Исмәғил улы Байегетов) 1974 йылдың 3 апрелендә Баймак районы Иҫке Сибай ауылында тыуған. Өфө сәнғәт училищеһының курай бүлеген (Ришат Рәхимов класы), Өфө дәүләт сәнғәт институтының фольклор һәм актер оҫталығы бүлектәрен тамамлаған. Әлеге көндә Мәскәү дәүләт театр сәнғәте институтында (ГИТИС) театр сәнғәте менеджеры — продюсер һөнәре буйынса белем ала. Сәғиҙулла Исмәғил улы — Башкортостан Республикаһының атказанған артисы, Ғата Сөләймәнов исемендәге курайсылар конкурсы (1993), «Урал моңо» (1995), «Ирәндек моңдары» (1996), «Актер йыры» (1998) конкурстары лауреаты. 1994—1997 йылдарҙа Сибай дәүләт филармонияһында солист—курайсы һәм «Аркайым» фольклор-эстрада төркөмө етәксеһе. 1997 йылдан алып Башкорт дәүләт академия драма театрында оркестр солисы — курайсы, аҙак актер.*

**Сәғиҙулла Байегет:**

— Бөгөнгө көндә башҡорт театры, музыкаль сәнғәте, хореографияһы бөтә донъя кимәлендә барған заманса процестарға бик иғтибарлы, сөнки беҙҙең тамашасы ла ул өлкәләрҙәге һәр яңылыҡты ентекләп күҙәтеп бара. Тамашасы үҙгәрә, яңы быуындар килә, сәнғәткә талаптар, критерийҙар ҙа үҫешһеҙ, үҙгәрешһеҙ ҡала алмай. Беҙ, артистар ҙа, ул үҙгәрештәрҙән ситләшә алмайбыҙ. Быны мин үҙ тәжрибәмдән дә сығып әйтәм. Театр сәнғәтендәге һәр яңылыҡҡа бик һиҙгер, абруйлы уҡыу йортонда — ГИТИС-та артабан белем алыуым, Мәскәү театраль мөхитендәге хәлдәр менән танышыу, төрлө ҡалаларҙан килгән йәштәр менән аралашыу һуңғы осорҙа минең дә ҡараштарымды шаҡтай киңәйтте, тиер инем.



Беҙҙең темаға яҡын торған мюзикл жанрына ҡараш һалайыҡ. Бәхетһәһ, ул

баштан уҡ беҙгә таныш, яҡын икән. Инглиз һүҙе «мюзикл» — шул уҡ «мюзикл комеди» — «музыкаль комедия» һүҙбәйләнешенән ҡыҫҡартып алынған термин. Тәүге мюзикл 1886 йылда Нью-Йоркта күрһәтелә. Шул осорҙа халыҡ Бродвейҙағы драматик театрҙарға ла, операға ла, балетҡа ла йөрөүҙән туҡтай. Бер яҡтан, ҡәҙимге тамашалар бөтәһен дә ялҡыта; икенсенән, Америка 1885 йылда көслө иҡтисади кризис кисергәс, был хәл сәнғәт өлкәһенә лә йоғонто яһамай ҡалмай. Ошо ауыр хәлдән сығыу маҡсатында, балет, опера һәм драма театрҙары берләшеп, биш сәғәтлек тәүге тамаша ойоштора һәм уны «мюзикл» тип атай. Был ҙур тамашаның аныҡ сюжеты, хатта авторҙары ла булмай — йыр һәм бейеүҙән торған яңы жанр ошо рәүешле донъяға килә. Мюзиклдар тәүге көндән башлап аншлаг менән үтә. Әлеге мәлдә был жанр айырыуса популяр. Мәҫәлән, быйыл Яңы йыл көндәрендә Американың мәҙәни үҙәге — йөҙҙән ашыу театр тупланған Бродвейҙа бер юлы 29 мюзикл күрһәтелде. Сағыштырыу өсөн: Мәскәүҙә шул осорҙа 1 генә мюзикл барҙы.

Бөтә донъя кимәленә мюзикл жанры кинематограф, айырыуса телевидение барлыҡҡа килгәс сыға. Беҙҙең тамашасы ул осорҙағы классик мюзиклдар менән һуңғы ун-ун биш йыл арауығында ғына таныша башланы. Уларҙың иң билдәлеләре — Ричард Роджерстың «Оклахома!», Фредерик Лоуҙың «Моя прекрасная леди», Леонард Бернстайндың «Вестсайдская история» мюзиклдары. Һуңғараҡ уларға төп ролде Лайза Миннелли башҡарған «Нью-Йорк, Нью-Йорк!», «Кабаре», Барбара Стрейзанд уйнаған «Смешная девчонка», «Хеллоу, Долли!» киномюзиклдары кеүек XX быуат сәнғәте шедеврҙары өҫтәлде. Голливуд кинематографистары уларҙы төшөргәндә, әлбиттә, ҡиммәтле декорацияларға, костюмдарға, махсус эффекттарға долларҙарын йәлләмәне, сөнки аҙаҡ бихисап «Оскар», «Эмми» премиялары алды, табыштары иһә йөҙәрләгән миллион доллар тәшкил итте. XX быуат аҙағында сәхнәгә һәм экрандарға мюзиклдар менән бер рәттән уларға яҡын жанр әҫәрҙәре — рок-опералар сыға башланы. Рок-опера, әлбиттә, мюзиклға конкуренция тәшкил итә алмай. Әммә Эндрю Ллойд Уэбберҙың «Иисус Христос — Суперстар», «Кошки», «Призрак оперы» кеүек рок-операларын, башҡа авторҙарҙың әҫәрҙәрен

*Азамат Ғафаров, Азат Йыһаншин*
*һәм Сәғиҙулла Байегет*
*”Өс егет — 2. Ҡурҡыныс комедия” тамашаһында*



сәхнәләштергәндә тупланған тәжрибә мюзикл жанрының артабанғы үҫешенә лә булышлыҡ итә.

Европала мюзикл ҡуйыусыларға Голливуд менән ярышыу, әлбиттә, ҡыйынға тура килә. Әммә унда ла донъя кимәлендәге шедеврҙар тыуып тора. Мәҫәлән, беҙҙең тамашасыға француз композиторы Мишель Леграндың «Шербургские зонтики», «Девушки из Рошфора» кеүек мюзиклдары киң билдәле.

Мюзикл өлкәһендәге яңылыҡтарҙы күҙәтеп барыусылар, моғайын, бөгөнгө көндә иң тәүҙә Оззи Осборндың «Распутин», «ABBA» төркөмөнөң «Мамма миа», «Бонни-М» ансамбленең «Бонни-М» мюзиклдарын атап үтер. Был әҫәрҙәрҙең ҡайһы берҙәре, айырыуса Фредерик Лоу, Леонард Бернстайн, Мишель Леграндың нәфис фильм версияһында әҙерләнгән мюзиклдары телевидение аша йыш күрһәтелә, заманында кинотеатрҙарҙа бара. «Призрак оперы» рок-операһына килгәндә, ул тамашасыға ике версияла билдәле. Сәхнә версияһын төрлө телевидение каналдары йыш тәҡдим итһә, нәфис фильм вариантының премьераһы бынан бер нисә йыл элек кенә беҙҙең Өфө кинотеатрҙарында ла ҙур уңыш менән үтте. «ABBA» менән «Бонни-М» мюзиклдарына килгәндә, уларҙың продюсерҙары реклама кампанияһын бик киң алып бара. Ҡыҙыҡһыныусыларға DVD дискылары тәҡдим ителә. Ҡыҫҡаһы, теләгән кеше тиҙ арала популяр әҫәрҙәрҙең юғары сифатлы яҙмаларын, тейешле әҙәбиәт, ентекләп төҙөлгән энциклопедиялар таба ала — хәҙер ул яҡтан ҡытлыҡ юҡ.

Элекке Советтар Союзында мюзикл һәм рок-опера жанрҙарын үҫтереүгә юл ҡуйылманы. Был өлкәләге тәүге тәжрибәләр Крис Кельми ижады менән бәйле. Мәҫәлән, ул 70-се йылдарҙа «Прикованный Прометей» исемле композиция ижад итеп, уны Таллинда күрһәтеп өлгөрә, артабан ул тыйыла. Марк Захаров етәкләгән «Ленком» театрында ойошторолған «Рок-ателье» төркөмөндә лә Крис Кельми үҙ ниәттәрен ғәмәлгә ашырып өлгөрмәй — ул арала СССР тарҡала. Аҙаҡ был эшкә Алексей Рыбников тотоноп, шул уҡ «Ленком» театрында «Юнона и Авось» һәм «Звезда и смерть Хоакина Мурьеты» рок-операларын сәхнәләштерә. Шул уҡ йылдарҙа Алексей Журбин менән Анатолий Васильев «Орфей и Эвридика» рок-операһын ҡуйып, унда төп ролдәрҙе Ирина Понаровская менән Ринат Әсәҙуллин башҡара. Ә мюзиклға тотонорға әлегә берәү ҙә баҙнат итмәй. Ниһайәт, 2000 йылда ғына Мәскәү оперетта театрында Януш Стоклостың «Метро» мюзиклы ҡуйыла (русса версияла). 2001 йылда Алексей Иваницкий һәм Георгий Васильевтың «Норд-ост» мюзиклы донъя күрә. Шул уҡ сезонда Стас Намин Эстрада театрында Голт Макдермоттың «Волосы» мюзиклын русса версияла ҡуя. Уларҙан һуң бер-бер артлы Фредерик Лоуҙың «Моя прекрасная леди», «ABBA» төркөмөнөң «Мамма миа», Эндрю Ллойд Уэбберҙың «Кошки» мюзиклдары рус телендә сәхнәгә сыға, әле «Бонни-М» версияһы әҙерләнә. Әйткәндәй, Мәскәү оперетта театры «Моя прекрасная леди» мюзиклы менән яңыраҡ беҙҙең Өфөлә лә сығыш яһаны. (Мюзиклдарҙың исемдәрен күнегелгәнсә русса әйтеп үтәм). Мәскәүҙә барған тамашаларҙан халыҡ араһында иң билдәлеһе, моғайын, «Норд-ост» мюзиклы булыр. Дубровкалағы террористик акт, тамашасылар,

актерҙар араһында күп һанлы ҡорбандарға килтереп, премьераны тотҡарлаһа ла, уны ҡуйыусылар, ысын ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, тиҙ арала әҫәрҙе яңынан әҙерлек кимәленә еткерҙе. Труппала беҙҙең яҡташтар — Өфө егеттәре һәм ҡыҙҙары ла бар.

Яҡындағы перспективаға килгәндә иһә, мәҫәлән, «Культура» каналындағы тура эфир осрашыуында Артемий Троицкий, мәрхүм Юрий Айзеншписты иҫкә алып, үткән йылдарҙа төрлө сәбәптәр менән тотҡарланып ҡалған проекттар, уларҙы тергеҙеү тураһында ла әйтеп үтте. Заманында актер Андрей Миронов популяр «Двенадцать стульев», «Золотой теленок», «Кавказская пленница», «Бриллиантовая рука» фильмдары нигеҙендә мюзиклдар ҡуйыу идеяһын күтәрә. Хәҙер бер нисә автор яңынан шул эшкә тотоноп, Миронов идеяһын тормошҡа ашырырға йыйына. «Кавказская пленница» фильмындағы «Песенка о медведях» йырын башҡарыусы, әлеге көндә Америкала йәшәгән Аида Ведищева, башҡа абруйлы шәхестәр был проектты уңышлы буласаҡ, тип ышандыра. Марина Влади Владимир Высоцкий ижадына нигеҙләнгән сәхнә әҫәре идеяһын күтәрә. Моғайын, яҡын киләсәктә ул идеялар тормошҡа ашырылыр. Артемий Троицкий күҙаллауынса, ундай әҫәрҙәргә «уңыш тулыһынса һәм алдан уҡ гарантияланған».

Беҙҙең башҡорт сәхнәһенә килгәндә, мюзикл жанрына мөрәжәғәт итергә беҙҙе сәнғәтебеҙ үҫеше тарихы, логикаһы үҙе этәрә. Хатта, башҡорт театры тәүге көндән алып йырлап һәм бейеп йәшәй, тиергә мөмкин. Беҙҙең «Ғәлиәбаныу», «Башмағым», «Еҙнәкәй» кеүек шедеврҙарыбыҙ — ғәмәлдә шул уҡ мюзикл, замансалаштырып әйткәндә. 70—80-се йылдарҙа режиссерҙар ҙа тамашаларҙың ошо яғына иғтибарҙы арттыра. Уңыш оҙаҡ көттөрмәй — халыҡ Фидан Ғафаров, Нурия Ирсаева кеүек нескә музыкаль тойомло артистарҙы күрергә ынтылып тора, спектаклдәр аншлаг менән үтә.

Беҙҙең бөгөнгө артистар быуыны ла шундай уҡ музыкаллеге менән айырыла. Улар араһында йырламаған, бейемәгән, музыка ҡоралдарында уйнамаған егеттәр һәм ҡыҙҙар бик һирәктәр. Эстрада, фольклор төркөмдәрендә тәжрибә туплағандар ҙа күп. Эш уларҙы тейешенсә ойоштороп, таланттарын, мөмкинлектәрен тулыраҡ файҙаланыуға ҡайтып ҡала. Бөгөн бында өс мөһим йүнәлеш төҫмөрләнә. Беренсеһе — элекке йылдарҙа ҙур уңыш менән барған музыкаль комедияларҙы яңыртып, заманса ремикстар ҡуйыу. Икенсеһе, бер һүҙ менән әйткәндә, шоу, йәғни тамаша программалары. Һәм өсөнсөһө, ниһайәт, яңы музыкаль комедиялар, мюзиклдар ижад итеү. Әйҙәгеҙ, ошо өс перспектив йүнәлеште барлап үтәйек. Өсөһөн дә, сөнки уларҙың өсөһө лә музыкаль мәҙәниәтебеҙ үҫеше өсөн әһәмиәтле.

Элекке йылдарҙағы, хәҙер инде классик мираҫҡа әйләнгән әҫәрҙәр тураһында һүҙ ҙә юҡ. Классика — ижадсы өсөн дә, башҡарыусы өсөн дә өлгө, эталон булып ҡала, ул быуындар араһында күсәгилешлек принциптары үтәлеүен, традициялар һаҡланыуын тәьмин итеп килә. Әгәр ул принциптарҙан, традицияларҙан ситләшһәң, тамашасы менән бәйләнеште юғалтасаҡһың. Әммә бында формалар үҙгәреп тороуын күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Һәр яңы быуын башҡарыусылар үҙ замандаштарының күңеленә ятышлы форма таба алһа, тамашасыһын да мотлаҡ

табасаҡ. 70—80-се йылдарҙа актер йырҙары популярлашып китеүенең, айырыуса Фидан Ғафаров, Нурия Ирсаева феномендарының сәбәбе, сере шунда. Классиканың нигеҙҙәре иһә Хәбибулла Ибраһимов, Мирхәйҙәр Фәйзи, Ғәзиз Әлмөхәмәтов кеүек бөйөк шәхестәр тарафынан һалынған.

Бөгөнгө шоу, тамаша программаларына килгәндә, улар ғәҙәттә йә тематик йөкмәткеһе, йә берәй мәҙәни сараға бәйле булыуы менән айырылып баһалана ала. Уларҙа йыш ҡына быға тиклем билдәле йырҙар, таныш көйҙәр, бейеүҙәр ҡулланылыуы ла ихтимал. Шулар иҫәбенә, мәҫәлән, киң билдәле «Таныш түгел таныштар», «Ике килә икән был ғүмер» тамашаларын индерергә мөмкин. Мин уларҙы, телевидение аша ла күрһәтелеп, киң тамашасы даирәһенә еткерелеү сәбәпле генә миҫал өсөн атап үтәм. Башҡаларҙан айырмалы, уларҙа бер аҙ сюжет линияһы төҫмөрләнеп, музыкаль комедияға ла хас элементтар индерелгән.

Әммә сюжет тарҡаулығы, музыкаль биҙәлештә тамашаның башынан аҙағына тиклем үткәрелгән сағыу, оригиналь, хәтерҙә ҡалырҙай музыкаль мотив, йәғни лейтмотив булмауы, тамашаның айырым өлөштәре араһында бәйләнеш етешмәүе сәбәпле, был тамашалар бер бөтөн сәхнә әҫәре кимәленә яҡынлаша алмай. Ләкин улар бөгөнгө көндә башҡарыусыларҙың мөмкинлектәрен асыу, тамашасыға тулыраҡ күрһәтеү өсөн бик кәрәк. Бөгөнгө артистик йәштәр араһында йырлаған, бейегән, музыка ҡоралдарында профессиональ кимәлдә уйнаған, көйҙәр, сценарийҙар яҙа алған егеттәр һәм ҡыҙҙар бихисап, һәм улар бындай тамашаларға бик мохтаж. Ләкин был йүнәлештә эстрадаға хас етешһеҙлектәр ҙә күп. Мәҫәлән, бер үк йырҙарҙың күп башҡарыусылар репертуарында ҡабатланыуы. Идеаль осраҡта һәр йырсы сәхнәгә үҙ репертуары менән килеп инергә тейеш. «Интеллектуаль милек һәм авторлыҡ хоҡуғы тураһында» Рәсәй Федерацияһы законы еренә еткерелеп үтәлһә, уны боҙған өсөн санкциялар ҡулланылһа, ошо өлкәлә хәл үҙгәрер ине. Әммә башҡарыусыларҙың тамашасы алдындағы этик яуаплылығы тураһында ла оноторға ярамайҙыр. Халыҡ бер йырсы үҙенсә асҡан, репертуарына алған йырҙы икенселәр башҡарыуына, әлбиттә, ирония менән ҡарай. Тәүләп башҡарыусы кисергән этик һәм матди зыяндан тыш, был күренеш тотош эстраданы, башҡорт йыр сәнғәтен дискредитациялай. Тамашасы һәр башҡарыусынан уға ғына хас оригиналь стиль, репертуар көтә. Ошо принциптарҙан сығып ҡарағанда, ҙур тамашаларҙа ла был талаптар ҡәтғи үтәлергә тейеш.

Беҙ, артистар, бер үк йырҙарҙың бихисап коллегаларыбыҙ репертуарында ҡабатланыуынан уңайһыҙлыҡ, ижади дискомфорт тойғоһо кисерәбеҙ. Йырҙы тәүге тапҡыр башҡарыу, уны асыу, артабан камиллаштырыу — ул бит ҙур ижади хеҙмәт, һәм ул хеҙмәт танылырға, плагиат хәүефенән һаҡланырға тейеш. Йәнә, был күренеш иң шәп йырҙы ла боҙоуға, башҡарыу стиле, манераһы, сифаты түбән төшөүгә килтерә. Был айырым йырҙарға хас күренеш. Ә мюзикл, музыкаль комедия жанрында бындай «эйәһеҙ» йыр юҡ. Әйтәйек, «Еҙнәкәй», «Ғәлиәбаныу»ҙы кем генә йырлап ҡарамаһын, тамашасы һәр саҡ тәү сығанаҡты — ошо йырҙар яңғыраған сәхнә әҫәрҙәрен күҙ уңында тотоп, сағыштыра, баһалай. Халыҡ өсөн, мәҫәлән, «Ғәлиәбаныу» йыры иң тәүҙә Фидан Ғафаров, Нурия Ирсаева исемдәре, улар башҡарған ролдәр менән бәйле. Был йырҙарҙың оло, күптәнге эмоциональ, тамашасы массала-

рының аңына һеңгән образдары бар. Шуға күрә улар оҙаҡ йәшәйәсәк. Күпмелер ваҡыт онотолоп торһалар ҙа, яңынан популярлыҡ яулайҙар.

Минең үҙемә лә шоу композициялары менән шөғөлләнергә тура килде. «Арҡайым» фольклор-эстрада төркөмө менән «Арҡайым» тамашаһын әҙерләнек. Ундағы бейеүҙәрҙең авторы — күренекле хореограф Гөлназ Аҡназарова. Һуңғараҡ режиссер-ҡуйыусы һәм хореограф Сулпан Асҡарова менән «Ете ырыу ҡыҙҙары», «Тик бишлегә!», «Их, һин, Сәғиҙулла!», «Байегеткә — 30!» (сценарийҙар авторы — Зөһрә Бураҡаева) тамашаларын ижад иттек. 1999—2000 йылдарҙа әҙерләнгән «Ете ырыу джентльмендары» проекты тураһында айырым әйтеп үтергә теләр инем. Уның музыкаһын Урал Иҙелбаев яҙҙы, сценарий авторы — Мөнир Ҡунафин, хореографы һәм ҡуйыусыһы — Сулпан Асҡарова. Рәсүл Ҡарабулатов, Заһир Шәйәхмәтов, Рөстәм Ғиззәтуллин, Азат Йыһаншин, Азамат Ғафаров, Хәким Мортазин, Руслан Ниғмәтов кеүек сәхнә оҫталары, Стәрлетамаҡ бейеү театры, кордебалет ҡатнашыуы тамашаны заманса камилләштерҙе. Әҫәр мюзикл жанрына яҡынлашты. Ҡайһы бер йәштәребеҙ, беҙҙә музыкаль тамашалар яй үҫешә, тиһә лә, уңыштарҙы ла тейешенсә баһалау кәрәктер. Әле беҙ Өфөгә килеп, уҡый башлаған 90-сы йылдар башында ғына башҡорт йәштәренең ундай шоу, тамаша ойоштороу өлкәһендә бер ниндәй тәжрибәһе юҡ ине. Бөтәһе лә 1991—1992 йылдарҙағы тәүге «Йәшлек-шоу» тамашаһынан, тәүге «Һылыуҡай» һәм «Урал моңо» конкурстары сиктәрендәге сығыштар тәжрибәһенән башланды. Хатта Мәскәүҙә лә уға тиклем Стас Намин, Крис Кельми, Алексей Рыбников, Алексей Журбин, Анатолий Васильев, Юрий Айзеншпис кеүек айырым энтузиастар ғына, власть даирәләренең ҡаты баҫымына ҡаршы тороп, тәүге әҫәрҙәрен ижад итә башлағайны. Үткән ун биш йыл эсендә ошо кешеләр тырышлығы менән элекке Союз киңлегендә мюзикл жанры таралып, үҙ урынын яулай башланы. Әлбиттә, башҡа йүнәлештәрҙә лә әүҙемлек талап ителә. Мәҫәлән, беҙҙә джаз, этник музыка, рок-опера, классик авангард музыкаһы, кантри, фолк төрҙәре һис үҫешмәгән, йәштәр массаһы ул өлкә менән бөтөнләй таныш түгел. Күптәр примитив рәүештә «башҡортҡа ул кәрәкмәй, башҡортта ул элек булмаған» тип фекерләй. Заманында ундай фекерләү рәүешен бөйөк остазыбыҙ Заһир ағай Исмәғилев: «Улай булһа, нота грамотаһын да йүнләп белмәгән йәштәр үҫтерәсәкбеҙ, ә бит беҙгә башҡорттарҙан композиторҙар, сәнғәт институты профессорҙары, дирижерҙар кәрәк — ғөмүмән, беҙгә иң тәүҙә классик опера һәм балет жанрын үҫтереү, үҙебеҙҙе ошо өлкәлә танытыу мотлаҡ», — тип кире ҡаҡҡайны. Баҡтиһәң, бөтәһе лә кәрәк икән, шул иҫәптән оперетта, мюзикл кеүек жанрҙар ҙа. Заһир Исмәғилевтың «Ҡурайҙан — операға тиклем!» тигәнен нәҡ шулай аңларға кәрәктер бөгөн, йәғни боронғо мираҫҡа, халыҡ ижадына таянып, донъя классикаһы кимәленә ынтылыуҙы күҙ уңында тотоп.

Бөгөнгө көндә иһә классика төшөнсәһе XX быуаттағы һымаҡ балет, опера, симфоник музыка менән сикләнмәй, бихисап күп жанрҙарҙы үҙ эсенә алды. XX быуатта ижад иткән джаз оҫталары Гленн Миллер, Бенни Гудмен, Дюк Эллингтон, Луи Армстронг, рок-н-ролл йүнәлешенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе Элвис Пресли, уларҙан һуң йәштәрҙең

кумирына әйләнгән Джон Леннон һәм «Битлз» төркөмө әҫәрҙәре хәҙер классикаға инеп бара, уларҙы хатта ҙур симфоник оркестрҙар үҙ репертуарына ала. Шулай уҡ Леонард Бернстайн, Фредерик Лоу, Тим Райс, Эндрю Ллойд Уэббер, Мишель Легран, беҙҙә Александр Цфасман, Олег Лундстрём, Георгий Гаранян әҫәрҙәре классика менән бер рәткә ҡуйыла. Бөгөн ниндәй генә заманса музыка энциклопедияһына күҙ һалма, иң тәүҙә ошо исемдәр күҙгә салына.

Совет осоронда музыка сәнғәте рәсми культурологик рамкалар сигендә барҙы. Репертуарҙар сикләнде. Үҙ мөмкинлектәрен, потенциалдарын тулыраҡ асыу ниәтенән сығып, ҙур күләмле, сюжетлы, форма йәһәтенән мюзиклға яҡын торған вокаль-хореографик проекттарға тотонған Крис Кельми, Стас Намин кеүек авторҙар «буржуаз индивидуализм»да ғәйепләнде. Комсомол ойошмалары, дәүләт органдары музыканттарҙы үҙҙәре ойошторған сараларҙа файҙаланырға, агитация һәм пропаганда эшенә йәлеп итергә тырышһа, йәш ижади көстәр был сараларҙан ситләшеп, музыкаль сәнғәттә яңы формаларға ынтылды. Власть даирәләре «кто платит, тот заказывает музыку» принцибын, шулай итеп, үҙҙәре теләгәнсә тулыһынса ҡуллана алманы. Борис Гребенщиков, Артемий Троицкий, Андрей Тропилло кеүек энтузиастар «самиздат» ысулы менән сығарған «Ур-лайт», «КонтрКультУра», «Рокси», «Зеркало» журналдары тирәһендә тупланған йәштәр, комсомолдан, юғары уҡыу йорттарынан ҡыуыуҙарға, суд процестарына, концерттарҙы тыйыуҙарға ҡарамаҫтан, еңеп сыға. Өфөлә шул замандағы хәлдәр, мәҫәлән, Юрий Шевчук һәм ул етәкләгән «ДДТ» төркөмө яҙмышында бик асыҡ сағылыш тапты. Йәштәр ул заманда уҡ ошо рәүешле яңы формалар эҙләне, бөгөнгө етди үҙгәрештәргә нигеҙ әҙерләй башланы.

Һуңғы ун-ун биш йыл эсендә эстрада ғәмәлдә коммерция нигеҙҙәренә күсте. Продюсер, менеджерҙарҙың роле ҡырҡа артты. Көсәйә барған конкуренция шарттарында башҡарыусыларҙан нимә талап ителә? Ниндәй жанрҙарға өҫтөнлөк биреләсәк? Музыка сәнғәтендә шундай тенденция күҙәтелә: тамашасы ла, музыканттар ҙа, башҡарыусылар ҙа бер бөтөн тамаша тәшкил иткән сәғәт ярымлыҡ — ике сәғәтлек композицияларға өҫтөнлөк бирә. Уларҙа, ҡағиҙә булараҡ, вокал, хореография, актер оҫталығы бергә үрелеп, мистерия, шоу элементтары ла ҡушылып, һәр осраҡта уникаль әҫәр хасил була. Әҫәр — тимәк, унын аныҡ сюжет линияһы, башынан аҙағынаса барған, лейтмотив ролен үтәгән төп мелодик линияһы булырға тейеш. Бер яҡтан, әгәр ул мюзикл, музыкаль комедия талаптарына яуап бирһә, әҙәби-поэтик текстҡа нигеҙләнеп ҡорола. Композицияға ингән айырым йырҙар, хореографик элементтар музыкаль яҡтан төп лейтмотив линияһына ярашлы, яңғырашлы килеп сыҡһа, әҫәр бер бөтөн тамаша кимәленә етәсәк. Әлбиттә, айырым элементтар төп лейтмотив менән диссонансҡа инеп, уға ҡаршы килеп, был бер бөтөнлөктө боҙорға тейеш түгел. Ошо принциптарҙы күҙ уңында тотоп, төрлө характерҙағы башҡарыусыларҙы йәлеп итергә мөмкин. Мәҫәлән, алда иҫкә алынған «Таныш түгел таныштар», «Ике килә икән был ғүмер» композицияларында Гөлсөм Бикбулатова, Лилиә Ишемйәрова кеүек йәш йырсыларҙан алып, был тамашала ла үҙ стилдәрен һаҡлаған «Караунһарай» егеттәренә, юғары лиризмға эйә Вәхит Хызыров,

моңло Рәүилә Мәсәлимова, күп яҡлы талантлы Гөлдәр Ишҡыуатова, тәрән драматизмға сорналған Азат Йыһаншинға тиклем, һәм башҡа бихисап, темпераменты, башҡарыу манераһы менән айырылып торған артистарға ла урын табылған. Шунда уҡ кордебалет, профессиональ бейеү театры ла сығыш яһай һәм тамашаға музыкаль-хореографик шоу элементтары ла өҫтәй. Йәғни, музыкаль комедия, мюзикл — һәр кемгә үҙ мөмкинлектәрен тулыһынса асыуға юл ҡуйған бик демократик, шуныһы менән халыҡсан да жанр.

Бында беҙ мюзикл, музыкаль комедия терминдарын айырып ҡарау яҡлы. Беренсенән, мюзиклда трагик, драматик мотивтар өҫтөнлөк итеүе лә ихтимал. Ә музыкаль комедияла беҙ күңелле ноталар күберәк булыуға өйрәнгәнбеҙ. Етмәһә, музыкаль комедия жанрында башҡорт театр сәнғәте үҙ тарихында бай ғына тәжрибә лә туплаған. Ул юл һыналған, жанрҙы беҙҙең тамашасы ихлас ҡабул итә, ярата.

Мюзиклға килгәндә, бында әлегә беҙҙә күп эш көтә. Беренсенән, мюзикл — ул донъяға яңыса, иркенерәк ҡараш. Мюзиклда бөгөн заманса мотивтарға мөрәжәғәт итмәй булмай. Башҡарыусыларҙан джаз, рок, рок-опера, этник музыка, брэйк, рэп, поп-музыка, рейв, хаус, транс, интеллектуалдар араһында тарала башлаған интелл-техно элементтары алып килеүен дә көтөргә кәрәк. Ул күренештәргә, бер яҡтан, ирония менән дә ҡарарға ярамай, сөнки араларында бик перспективалы йүнәлештәр килеп сығыуы ла ихтимал. Икенсе яҡтан, тамашаны иртәгә үк онотоласаҡ, әммә бөгөн бик популяр йүнәлешкә нигеҙләнеп ҡороу ҙа күптәрҙе ҡәнәғәтләндермәйәсәк. Йәнә, потенциаль тамашасының бик аҙ өлөшөнә генә таныш элитар йүнәлешкә эйәреү ҙә хәүефле. Бында мюзикл, музыкаль комедия жанрҙары, вокаль-хореографик композициялар йүнәлешендә эшләүселәрҙән ҙур мәҙәни зауыҡ, сәнғәттең күп өлкәләрендә энциклопедик эрудиция, перспективаны һиҙемләү таланты, көслө халыҡсанлыҡ тойғоһо талап ителәсәк. Быны мин ГИТИС студенты, продюсер һөнәрен үҙләштереүсе буларак та күҙалларға тырышам. «Өс егет» музыкаль театрын ойоштороу тәжрибәһе лә беҙҙе мюзикл идеяһын тәрәнерәк аңлауға яҡынлаштыра. Заман талаптары менән дә иҫәпләшмәй булмай: бөгөнгө музыкаль театр коммерция нигеҙендә ойошторолорға тейеш. Үҙәк мәсьәлә — ошо йүнәлештә сәхнә әҫәрҙәре ижад итеү. Әҫәрҙәр мауыҡтырғыс драматик сюжетлы, лейтмотив функцияһына тап килерҙәй көслө музыка нигеҙендә, ошо лейтмотивҡа үрелгән, бер бөтөн тәшкил иткән вокаль, хореографик композициялар ҡулланып әҙерләнгән заманса тамаша кимәлендә булырға тейеш. Етди әҫәр композиторҙар, хореографтар, башҡарыусылар өсөн дә ҙур һынауға әйләнеп, үҙ мөмкинлектәрен, потенциалын тулыраҡ асыуға этәрәсәк. Заманында «Ғәлиәбаныу», «Аҫылйәр», «Башмағым», «Еҙнәкәй» кеүек мәңгелек шедеврҙарҙы сәхнәгә сығарған бөйөк шәхестәр күп нәмәне алдан күреп, ысын мәғәнәһендә үҙ халҡы өсөн ижад иткән. Ундай шәхестәр милли сәнғәтебеҙҙең һәр төрөндә бихисап. Ошо тәңгәлдә күренекле драматург Бертольт Брехттың киң билдәле һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү урынлы булыр ине. Сәнғәттең бөтә төрҙәре бер иң ауыр сәнғәткә — кешеләрҙе был донъяны аңларға, йәшәргә өйрәтеү сәнғәтенә хеҙмәт итә.

*Закир ЗИННӘТУЛИН әҙерләне.*